22 Юлмухаметов Лукман Сәлимгәрәй улы.
1902 йылда тыуған.

Һуғышка тиклем төҙөлөш бригадаһының бригадиры булып эшләй. Уның етәкселегендә төҙөлөш бригадаһы ферма һарайҙары, башланғыс класстар өсөн мәктәп төҙөй.
1935-37 йылдарҙа Нуғай электр станцияһын төҙөүҙә лә қатнаша ул. Бөйөк Ватан һуғышы башланғанда ла ул төҙөлөш бригадаһы бригадиры ине.
Бөйөк Еңеүҙең 30 йыллығы алдынан һуғышта үткән юлдарын, ул түбәндәгеләр һөйләтте.

„Мин дошманға қаршы һуғышқа 1941 йылдың көҙөндә киттем. Беҙ Юлык ауылынан 6 кеше (Кужин Әхәт, Юлмухаметов Абдулла, Юлмөхәмәтов Юлмөхәмәт, Мөхәмәтдинов Әфтәкола. Хайрулла һәм мин) генерал Шаймуратов етәкселегендә Башҡорт кавалерия дивизияһында булдыҡ. Мин дивизияның тыуҙа майор, ә һуңынан генерал Таһир Кусимов етәкләгән 275-се полкында хеҙмәт иттем.
Беҙҙең полк Дим станцияһында урынлашқайны, ә икенсе полк Жуково станцияһында, өсөнсөһө Абдуллино ауылында.
Башҡорт кавалерия дивизияһы

1942 йылдың апрелендә һуғышқа озатыла.
Июль баштарында беҙ фронттың алғы

кызыгына барып еттек һәм һушыка шудек. Олы ягына бутында һөҗүм итеп килеүче дошманды туктаттык һәм сигендерзек. Уннан һуң Дон ягыны бутында һәм Сталинград янында һуғыштык. Һуғышта пулеметчиктә, развецчиктә булырға тура килде.
Бер вакыт командир мине разведкаға ебәрзе. Дошманның касан һөҗүм итәсе һәм күпме көсө булыуы турағында „тел" кәрәк ине. Китеп барғанда немец һалдаттарының янына ике булыузарын шәйләнем, улар янына табан шыуышып киттем. Кальныктың теге яғында байтак немец һалдаты арака эсеп, ауыз гармонында уйнап, күңел асып ултыралар ине. Автоматтан ут астым. 12-һен атып үлтерзем, берәүһен пленгә алдым һәм командирға алып килеп тапшырзым. Азактан белеүемсә пленгә алынған немец командование өсөн бик кәрәкле мәғлүмәт бирген икән. Ошо батырлығым өсөн командир миңә кызыл йондоз ордене тапшырзы.
Тагы ла бер вакыт турағында һөйләтеп эле. Пулемёт расчетындағы Салимов Янырза (Стәрлебаш районынан) менән безгә һөҗүм итеп килеүче дошманды үзебез билгеле позицияларға

үтергәнек. Тулеат менән дошман-
дың бик күп кешеһен кырып һалдык.
Был һуғышта күрһәткән батырлығы өсөн миңә һәм Соловка. Батырлык өсөн миҙалы бирҙеләр. Был һуғышта мин үҙем дә яраландым. Төрлө калаларҙа госпиталдәрҙә дауаландым. Бер ни тиклем төҙәлгәс, тыуған ауылым Юлыкка кайтырға насип булды" тип һүҙен тамамланы.

Әйе, Локман Сәлимгәрәй улы Башкорт кавалерия дивизияһы составында оҙон һәм бик тә ауыр һуғыш юлдары үтә. Һуғышта алған яралары һәләмәтлегенә инвалид булып кайтыуына карамаҫтан эшкә тотона. Тәүҙә ул төҙөүселәр бригадаһы бригадиры булып эшләй. Һуңынан ул төрлө оҫталык эштәрен башкара. Сана эшләнеме, арба эшләнеме, бура бураһымы, тәҙрә яһы куйһынмы, тәҙрәләргә быялалар куйһынмы - бөтәһе лә уның кулдары аша үтә.

60 йәше тулғаста йәшәүенең һуңғы көндәренә тиклем тин әтерлек оҫталык менән шөғөлләнде. Уның эшләгән бәләкәй саналарын, матур итеп биҙәлгән һыу көйәнтәләрен ауыл

халкы гына түгел, тирә як авыл кешеләре дә Әзәм-каран базарында мактап ала торганны.

Бик озак та авырмый 1977 елда вафат булды.

Тормыш иптәше Гөлбану мине күп кенә балалар үстереп үз-алдына тормыш юлына бастырдылар.

Локман Сәлимгәрәй улының балалары: Миңнежиһан, Фаяз, Миңсем, Гөлсем, Гөлсирә, Раиль!

Балаларыгыз олаталарыгызның Бөек Ватан һугышында орден һәм медальләргә лаек булган батыр һугышчы, ә тыныч тормышта авылның балта остасы булуын беләсездәр.